*Миңниса БАҺУМАНОВА*

# Хәстәрлекле етәксе

## Һөнәрле ҡулында мең һөнәр

*Башҡортта «йән тартмаһа ла ҡан тарта» тигән әйтем бар. «Нәҫел — нәҫелгә, тамыр — тамырға тарта» тип тә ҡуялар. Байрамғоловтарҙың ғаиләһе менән ҡайта-ҡайта осрашыуым ана шул тәбиғи көс ярҙамындалыр, тим. Ялан-бөрйән шәжәрәһендә минең тыуған ауылым Юлдаш (Федоровка районы) кешеләренең боронғо ата-бабалары Өскүл янынан күсеп киткәндәр. Тарихи әҙәбиәтте өйрәнә, Баймаҡ районы аҡһаҡалдары менән йыш осраша торғас, Өскүлдең Иҫәнбәт (боронғо Сураш утары) ауылынан төньяҡтараҡ урынлашҡанын белдем. 1755 йылғы ихтилалдан һуңғы ҡырғын арҡаһында ауылдаштарым үҙ тамырҙарынан айырылып китеп, хәҙерге Ишембай, Мәләүез, Стәрлебаш райондары ерҙәрендә һуғыла-һарҡа нигеҙ ҡороп та уңмағас, Ырымбур губернаһы Верхнеуральск өйәҙендә төпләнеп ҡалырға мәжбүр булалар.*

*Миҙхәт Әсфәндиәр улы Байрамғолов әсәһе яғынан Сураш батыр нәҫеленән икән. Уның ғаиләһе менән мине тормош иптәшем Аҫылғужа Баһуманов таныштырғайны. Шул тиклем яҡын ҡабул иттеләр — килен кешегә лә шундай яғымлы мөнәсәбәт булғанына һаман да аптырайым. Ирем Темәс интернат-мәктәбен тамамлағас, Ишмырҙа (икенсе исеме Йүкәләр) һигеҙ йыллыҡ мәктәбендә бер йыл уҡытҡан саҡта уларҙа фатирҙа торған. Миҙхәт ағай Таңһылыу Ғүмәр ҡыҙы менән ике ул үҫтерҙеләр. Аҫылғужа: «Мин уҡытҡан осорҙа Фирғәт менән Булат бәләкәй ине, Фирғәте яңы уҡырға төшкәйне, — тип хәтерләгәйне. Хәҙер инде улар ҙур кешеләр: Фирғәт республикала билдәле табиб, Булат — отставкалағы полиция хеҙмәткәре, подполковник.*

*Ауыл ерендәге һанап бөткөһөҙ көнкүреш эштәренән, мәктәптә уҡытыуҙан, бына тигән улдар үҫтереүҙән тыш, Миҙхәт ағай һүрәт төшөрә. Етмәһә «Тыуған яғым — алтын бишек» тигән шиғыр йыйынтығы әҙерләп баҫтырҙы. «Миҙхәт Байрамғоловтың шиғыр яҙғанын тәүге тапҡыр танышҡандан һуң байтаҡ йылдар үткәс кенә белдем, — тип иҫләгәйне Аҫылғужа, уның бер шәлкем шиғырҙарын «Башҡортостан» гәзитенә (2001, 5 май) тәҡдим итеп, баш һүҙ яҙған саҡта.*

*Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Баймаҡ районының Батыр Вәлид исемендәге премияһы лауреаты Миҙхәт Әсфәндиәр улы Байрамғолов Ирәндектең Туғажман түбәһендә ҡурайға һәйкәл ҡуйҙы, тап ошо эше өсөн ЮНЕСКО-ның Маҡтау ҡағыҙын алды. Хаҡлы ялға сыҡҡас та бына шундай изге донъяуи эштәр менән мәшғүл булды һәр яҡтан бөтмөр Миҙхәт ағай Байрамғолов.*

## Нигеҙле талант


*Фирғәт Миҙхәт улы Байрамғолов*

Фирғәт Миҙхәт улы тураһында яҙырға йөрьәт итеүемдең дә сәбәбе — уның ата-әсәһенә оло хөрмәт, тәрән ихтирам хисе йөрөтөүемдән. Унан, ныҡлы ғаиләлә генә шундай төплө белемле, эшлекле балалар үҫкәненә иманым камил. Нисектер шулай килеп сыҡты, ишетә белһәм дә, Байрамғоловтарҙың талантлы улдарын күреп танышыу ошоғаса насип булманы. Ирем Аҫылғужаның тыуыуына 70 йыл тулыу айҡанлы ҡәҙер һәм хәтер кисәһен үткәреү мәшәҡәттәре менән баймаҡтарҙың Өфөләге «Яҡташтар» клубына мөрәжәғәт иттем. Уны ла Аҫылғужаның дуҫтары кәңәш иткәйне. Баҡһаң, Фирғәт Миҙхәт улы Байрамғолов «Яҡташтар» клубы рәйесе булып сыҡты. Ата-әсәһен яҡшы белгәнлектән, мин үҙ хәлемде асыҡтан-асыҡ, туғаныма әйткән кеүек, систем дә һалдым. Тупһанан тупһаға йөрөп тә, хаттар яҙа-яҙа, матди ярҙам күрһәтеүсе тапмағас, уның янына сараһыҙҙан барып юлыҡҡайным. Һай, бер туған кеүек шул Аҫылғужаның яҡташтары! Ғәжәп хәл — барлыҡ борсолоуҙарымды Фирғәт Миҙхәт улы биш минут эсендә хәл итте лә ҡуйҙы. Бөгөнгө көндә әҙ һүҙле, бик етеҙ, эшлекле етәксене күреү, бигерәк тә йәш кешенең шулай булыуы уғата ышанмаҫлыҡ хәл. Бына шулай яҡындан танышып киттек.

Атаһын ауылдан ауылға йә уҡытыусы, йә мәктәп директоры итеп күсереп йөрөтөү арҡаһында, Фирғәт Миҙхәт улы 1960 йылда Баймаҡ районының Әхмәр ауылында тыуһа ла, Ишмырҙа, Баймаҡ, Төркмән мәктәптәрендә белем ала. Еңеү көнөндә тыуғанғалыр инде, ул алдына ҡуйған маҡсаттарына ирешмәй ҡалмай.

Урал аръяғы районлары өсөн ул ваҡытта Сибайҙа ике генә училище кадрҙар әҙерләй ине: береһе уҡытыусылар, икенсеһе табиптар уҡытты. Фирғәт, ата-әсәһенең өлкәнәйеүен иҫәпкә алып микән, Сибай медицина училищеһын һайлай. 1979 йылда училищены тамамлағас та юғары уҡыу йортона инергә ашҡынып бармай. Фельдшер-акушер булып үҙ районының Ирәндек участка дауаханаһына эшкә төшә. Теләге — табип һөнәрен нигеҙҙән өйрәнеү.

Өс йыл Ҡытай сигендә хеҙмәт итеп ҡайтҡас, белеме, тормош тәжрибәһе менән һәр эшкә яраҡлы, үҙаллы егет Башҡорт дәүләт медицина институтына ситтән тороп уҡырға инә. Бер ыңғай ҡаланың 21-се һанлы дауахана поликлиникаһында эшләй. Юғары уҡыу йортон тамамлағас, шул уҡ дауахала анестезиология-реанимация бүлеге табибы вазифаһын үтәй башлай. Аҙаҡ Республика токсикология-реанимация үҙәгендә 12 йыл хеҙмәт итә.

Фирғәт Миҙхәт улының артабанғы хеҙмәт юлы һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә бик ҙур вазифалар биләү менән бәйле: 1999 йылда 2-се һанлы клиник дауахананың 3-сө терапия бүлегендә мөдир булыуҙан башланған үҫеш баш табип итеп тәғәйенләнеү менән тамамлана. Баш табиптың бында башҡарған ҙур эштәре бихисап. Мәҫәлән, 2000 йылда Фирғәт телемедицина үҙәге ойоштора һәм дауахана табиптарына, республиканың барлыҡ һаулыҡ һаҡлау ойошмаларына сит ил дауаханалары, үҙәктәре менән (Германия, Израиль, Голландия һ.б.) бәйләнешкә инеп, консультация үткәрергә мөмкинлек аса. Телеүҙәк аша Рәсәйҙең арҙаҡлы ғалимдарының сығыштарын, лекцияларын, операцияларын күреп өйрәнергә шарттар тыуҙырыла (мәҫәлән, Бакулев исемендәге йөрәк-ҡан тамырҙары хирургияһы фәнни үҙәге белгестәренең, академик Лео Антонович Бокерияның сығыштарын тыңларға, операцияларын күҙәтергә була). 2000 йыл аҙағында телеүҙәктең филиалы Стәрлетамаҡ ҡалаһында асыла һәм ошо төбәк дауаханаларына консультациялар бирелә башлай.

2001 йылда Фирғәт Миҙхәт улы Башҡортостан хөкүмәте ярҙамында торлаҡ йорто төҙөтә һәм берәр бүлмәле 38 фатирҙы, бөтә кәрәк-яраҡтары (мебель һ.б.) менән йыһазландырып, 2-се һанлы клиник дауахана хеҙмәтсәндәренә бүлеп бирә.

Һаулыҡ һаҡлау учреждениеларын медицина кислороды менән тәьмин итеү өсөн кислород заводы һатып алына, һөҙөмтәлә хәҙер Өфө дауаханалары медицина кислородына ҡытлыҡ кисермәй.

Яуаплы эшендә камил, заман талабына бәрәбәр һөнәрмән булыр өсөн, 2002 йылда Байрамғолов, Башҡортостан Республикаһы Президенты эргәһендәге Дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһында уҡып, дәүләт һәм муниципаль идаралыҡ менеджеры дипломы ала. Рәсәй Федерацияһы хөкүмәте эргәһендәге Финанс академияһының Өфө филиалын тамамлағас, финанс белгесе булып китә.

Һәр ваҡыт эҙләнгән, өйрәнгән, белемгә ынтылған Фирғәт Миҙхәт улы 2003 йылда Республика перинаталь үҙәгенә баш табип итеп тәғәйенләнә. Уға тиклем 2000 йылдан 2-се һанлы бала табыу йорто базаһындағы Ғаиләне планлаштырыу үҙәге тип аталып йөрөгән дауахана, федераль кимәлдә перинаталь үҙәктәр барлыҡҡа килә башлағас, 2002 йылдан Ғ.Ғ.Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһы филиалы итеп үҙгәртелә.

— Башҡортостандың тәүге Президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов мине саҡыртып алды ла, әле төҙөлөп бөтмәгән, юридик исеме лә билдәләнмәгән яңы дауахана Республика перинаталь үҙәген ойоштороу бурысын йөкмәтте. Дүрт ай буйы эш хаҡы алмайынса, үҙәктең уставын, хеҙмәткәрҙәренең штатын раҫлаттым, шунан һуң 2003 йылдың 13 майында «Дәүләт һаулыҡ һаҡлау бюджет учреждениеһы «Республика перинаталь үҙәге» тураһында бойороҡ сыҡты. Элек эшләп килгән кадрҙарҙы тотош эштән ебәрергә тура килде. Төҙөлөш бөткәс, коллективты яңынан тупланым, — тип хәтерләй Фирғәт Байрамғолов тәү эш башлаған йылдарын. — Рәсәй Федерацияһы хөкүмәте вице-премьеры Г.Н.Ҡарелина ҡатнашлығында 19 декабрҙә үҙәк рәсми рәүештә асылды.

Республика перинаталь үҙәге ауырлы ҡатындарға һәм яңы тыуған сабыйҙарға юғары квалификациялы медицина ярҙамы күрһәтеү өсөн ойошторола, шунлыҡтан уникаль йыһаздар, заманса дауалау, диагноз ҡуйыу технологиялары, алдынғы белгестәр ошонда бергә туплана.

Һаулыҡ һаҡлауҙы ойоштороу буйынса юғары категориялы белгес булһа ла, Фирғәт Миҙхәт улына хәҙерге кеүек ойошҡан коллективты яйға һалып ебәреү еңелдән булмай. Перинаталь үҙәктең абруйы яңы мөнәсәбәт нигеҙендә идара итеүҙән, халыҡҡа заманса медицина ярҙамы күрһәтеүҙән туплана башлай. Баш табип эш барышында технологияларҙы яңыртыуға, белгестәрҙең белемен камиллаштырыуға, мәғлүмәт базаларын үҫтереүгә, системалы автоматлаштырыуға һәм яңы идеяларға оло әһәмиәт бирә.

Байрамғоловтың һәм уның коллегаларының «Башҡортостан Республикаһының хәүефле төркөмгә ҡараған ауырлы ҡатындары мониторингы» программаһы — «Башҡортостандың иң яҡшы тауарҙары — 2009» республика конкурсы лауреаты. «Рәсәйҙең 100 иң яҡшы тауары» конкурсында ла ул еңеү яулай, уйлап табыусылар авторлыҡ патенты ала.

Башҡорт дәүләт медицина университетының дүрт кафедраһы — клиник фармакология, медицина генетикаһы, акушер-гинекология һәм һаулыҡ һаҡлауҙы ойоштороу кафедралары перинаталь үҙәктең клиник, ә неврология кафедраһы уҡыу базаһы иҫәпләнә.

Фирғәт Миҙхәт улы етәкселегендәге перинаталь үҙәктең йылдан-йыл етеҙ үҫешен ошо миҫалдар ҙа иҫбатлай. Мәҫәлән, 2006 йылда ультратауыш скринингы ярҙамында әсә ҡарынында уҡ нәҫел ауырыуҙарын табыу һәм дауалау өсөн тикшереү эштәре башлана. Фенилкетонурия, муковисцидоз, Верднига-Гофман арҡа амиотрофияһы (арҡа мускулдары епсәләренең нәҙегәйеүе, ҡыҫҡарыу һәләттәренең кәмеүе), андреногениталь синдром, галактоземия, тыумыштан булған гипотиреоз кеүек нәҫел ауырыуҙарының баланың психик һәм физик үҫешенә кире йоғонто яһауы тикшерелә һәм был ауыр сирҙәрҙән ҡотҡарыу саралары күрелә.

Рәсәй медицина генетиктары йәмғиәте «Медицина генетиктарының нәҫел һәм тыумыштан килгән ауырыуҙарҙы профилактикалау буйынса хәҙерге уңыштары» тигән темаға 2005 йылда Өфөлә V Рәсәй генетиктары съезы үткәрелә. Рәсәй медицина һәм кеше генетикаһы йәмғиәте рәйесе Евгений Гинтер, һуңғы биш йылда йылдам үҫешкән перинаталь үҙәк эшенә оло баһа биреп, Өфөлә көслө генетиктар мәктәбе барлыҡҡа килде, тип билдәләй. Ошо йылда «Балалар һәм үҫмерҙәр һаулығы» темаһына Башҡортостан — Швейцария проектына ярашлы Лозаннала уҡыуҙар ойошторола. Резустар тап килмәгән осраҡта һау-сәләмәт бала таптырыу буйынса 2003 йылда ике табип белем ала. Халыҡ-ара сертификат 2005 йылдың сентябренән уларға әсә ҡарынындағы баланың ҡанын алмаштырыу кеүек ҡатмарлы операция яһарға мөмкинлек аса.

2004 йылда гинекология, 2006 йылда ярҙамсы репродуктив технологиялар бүлектәре асыла.

2006 йылда простата аденомаһы, простата шешеүҙән интегеүселәр «Простасан» аппаратында трансуреталь микротулҡынлы терапия аша дауалана башлай.

Ошо йылдың 1 июненән неонаталь скрининг лабораторияһында яңы тыуған балаларҙа нәҫел ауырыуы барлығы-юҡлығы тикшерелә. 2012 йылда ул яңы аппараттар менән йыһазландырыла.

2007 йыл тыумыштан килгән йәки үҙләштерелгән тромбофилияны тикшереү, толҡаты төшөү булған ауырлы ҡатындарҙың ҡан туҡталышы боҙолоуын комплекслы дауалау методы индерелә.

2011 йылда Рәсәй Федерацияһы Һаулыҡ һаҡлау һәм социаль үҫеш министрлығы «Бала үҫеше боҙолоуын пренаталь (баланы тапҡанға тиклем) диагностикалау» проектын тәҡдим итә. Уға ярашлы 29 июндә беҙҙә һаулыҡ һаҡлау министрлығының «Башҡортостан Республикаһында ҡарындағы үҫеше боҙолған балаларға тыумаҫ элек диагноз ҡуйыусы район-ара кабинеттар һәм бүлектәр ойоштороу тураһында»ғы бойороғо көскә инә һәм пренаталь диагностика бүлеге асыла. 2012 йылда унда түләүле хеҙмәтләндереү ойошторола.

Шулай итеп, ҡайһы бер уңыштарға иғтибар иткәндә лә перинаталь үҙәктең эре аҙымдар менән үҫеш кисергәнен тояһың. Ә һәр бер был уңышта уның баш табибы Фирғәт Миҙхәт улы Байрамғоловтың эшмәкәрлегенең киң ҡолас алғаны шикһеҙ.

Фирғәт Байрамғолов, табип булараҡ, сәләмәт тормош рәүешен актив пропагандалап ҡына ҡалмай, уның файҙаһын үҙ тәжрибәһе аша дәлилләргә тырыша. Ысынлап та, үҙ сәләмәтлегенә хужа кешенең бөтә организмы теүәл, уның функциялары ла килешле үҫешә. Ябайлаштырып әйткәндә, күңел дә көр, тамаҡ та туҡ, эш тә уңыш килтерә. Эш һанда түгел, эш нисек ғүмер уҙғарыуҙа икәнлеген «Йөҙ йәшәмәһен, төҙ йәшәһен» тигән боронғо әйтем дә дәлилләй. Сәләмәт тормош алып барған, психик яҡтан һау кешеләр үҙҙәрен физик, эмоциональ, хатта рухи яҡтан үҫтерергә тырыша. Йәшәү мәғәнәһен яҡшы төшөнөп, маҡсатлы тормош көтөргә, көндәлек йәшәйештәрен контролдә тотоп, үҙ тирәһендәге кешеләрҙең терәген тойоп, үҙҙәре лә кешегә ярҙам иткән шәхестәрҙең береһе ул Фирғәт Миҙхәт улы Байрамғолов.

Республика перинаталь үҙәгендә баш табип булыуҙан тыш, бер үк ваҡытта анестезиология-реанимация бүлегендә эшләп, йыш ҡына кеше ғүмерен үлем тырнағынан йолоп алырға тура килгәнгәләр инде, ә бәлки организмын сыныҡтырыу, хисле күңелен нығытыу өсөн микән, Фирғәттең һыу аҫтында йөҙөү, һунар итеү кеүек экстремаль спорт төрҙәре менән мауығыуы ихтирамға лайыҡ. Уның хатта дайвинг буйынса халыҡ-ара сертификаты бар. Төрлө һалҡын һәм атыу ҡоралдары коллекцияһы йыйыу — уның йәнә бер шөғөлө.

Ижади таҫыллыҡ, тырышлыҡ, белемгә ынтылыу һәм һайлаған һөнәренә бирелгәнлек уҡытыусы ата-әсәһенән уға ла күскән. Шул тиклем ҙур дауахана менән идара итеүҙе Фирғәт Миҙхәт улы ижади хеҙмәт менән бик оҫта бәйләй: концерттар, кисәләр ойоштора, үҙе йырлай, шиғырҙар яҙа, һүрәт төшөрә, гитара, ҡумыҙ, ҡурай кеүек музыка ҡоралдарында уйнай. Билдәле шәхестәрҙең кисәләренә, артистарыбыҙҙың концерттарына йөрөй. Уның талантының асылы — халыҡҡа халыҡса хеҙмәт итеү. Бик ярҙамсыл, кеше мохтажлығына иғтибарлы булғаны өсөн уны

һәр кем хөрмәт итә. Ауырыуҙар менән дә бик тиҙ уртаҡ һүҙ таба, ҡайғыҡыуаныстары менән бүлешә. Һәр эште дөрөҫ ойоштора белеүе уға бер урында тиҫтә йылдан артыҡ баш табип булып эшләргә мөмкинлек биргән дә инде.

Фирғәт Миҙхәт улының тикшеренеүсе ғалим, медицина фәндәре кандидаты икәнлеген оноторға ярмай. Уның 30 ғилми хеҙмәте, дүрт монографияһы, бер патенты бар. Республика перинаталь үҙәге тәүге көнөнән тип әйтерлек Башҡорт дәүләт медицина университеты, Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө фәнни үҙәгенең Биохимия һәм генетика институты һәм башҡаланың балалар клиникаһы, ҡатын-ҡыҙҙар консультацияһы, бала табыу йорттары кеүек медицина учреждениелары менән хеҙмәттәшлек итә. Бынан тыш, Рәсәйҙең перинаталь үҙәктәре, СНГ илдәренең фәннитикшеренеү институттары һәм Англия, Германия, Голландия, Израиль, Италия, Швейцария һәм башҡа илдәрҙең донъя кимәлендәге үҙәктәре, мәктәптәре менән бәйләнеш ойошторолған. Берләшкән милләттәр ойошмаһының Балалар фонды тарафынан «Балаларға мәрхәмәтле дауахана» акцияһы 1994 йылдан Рәсәйҙә ғәмәлгә инә. Республика перинаталь үҙәге был акцияны ла күтәреп ала.

Бөгөнгө көндә Фирғәт Миҙхәт улы ҡатмарлы тын юлы наркозы, ҡан тамырҙарына наркоз ебәреү кеүек профессиональ анестезиолог-реаниматолог тәжрибәһенә эйә. Баш табип кешенең тын алыу юлдарына севоран ярҙамында ингаляция яһау методын үҙе генә ҡулланып ҡалмай, коллегаларына ла файҙаланырға тәҡдим итә. Операция алдынан кетонал, перфалган ярҙамында ауыртыныуҙы баҫыу сараларын күрә.

Фирғәт Миҙхәт улы «Анестезиология һәм реаниматология» һөнәре буйынса 1999 йылдан юғары квалификация категорияһын йөрөтә, шулай ҙа ул өйрәнеүҙән, квалификацияһын күтәреүҙән туҡтамай: 2014 йылда Башҡорт дәүләт медицина университеты янындағы диплом алғандан һуң белем биреү институты базаһында белемен камиллаштыра. 2012 йылда Мәскәүҙә уҡып ҡайтҡас, баротерапия кабинетында ауырыуҙарҙы дауалай башлай. Белемгә харыз Байрамғолов медицинаға ҡағылышлы махсус әҙәбиәт менән даими танышып бара, фәһем алырлыҡ семинарҙарҙа, конференцияларҙа актив ҡатнашып та белемен арттыра. Баш табип коллегаларының да үҙ белемен үҫтереүен, яңы технологиялар үҙләштереүен талап итә. Бөгөнгө көндә йөҙ кеше төрлө махсус уҡыу йорттарында белем-тәжрибәләрен камиллаштырған, һаман да уҡыуҙар, тәжрибә уртаҡлашыуҙар дауам итә. Мәҫәлән, ультратауыш диагностикаһы белгестәренең Халыҡ-ара медицина яралғыһы фонды сертификаты алыуы ла Республика перинаталь үҙәгенең мәртәбәһен билдәләй.

Фирғәт Байрамғоловтың Өфөлә баймаҡтарҙың «Яҡташтар» клубын етәкләүен әйткәйнем инде. Уның булдыҡлылығы, ныҡышмалылығы, кеше менән эшләй белеү һәләте бында ла күренә: мәҙәни саралар, спорт ярыштары, матурлыҡ конкурсы, район етәкселәренең юғары уҡыу йорттарын тамамлаусылар менән осрашыуҙарын ойоштора, райондың күренекле шәхестәрен тантаналы ҡотлау кисәләрендә ҡатнаша. Ул шулай уҡ Баймаҡ районы йәштәренең Өфө ассоциацияһы рәйесе.

Ун ике йылдан ашыу Республика перинаталь үҙәгендә эшләү осоронда, әлбиттә, уның күңелендә бик күп идеялар тыуа. Амбулаторияһы, бала табыу, әсәләрҙе һәм балаларҙы һауыҡтырыу бүлектәре, клиника, хирургия, магнит-резонанс томографияһы һәм башҡа бүлектәрҙең бер ҡыйыҡ аҫтында булыуы — уның күптәнге хыялы. Әле килеп, ошо хыялы тормошҡа ашып, хәҙерге заман талабына ярашлы бина төҙөлөп бөтөп барғанда, уны биҙәү, яңы бүлектәрҙе йыһазландырыу хаҡында борсола, фонтан төҙөү, үҙәктең символын булдырыу менән мәшғүл. Һуңғы мәсьәлә буйынса Башҡортостан рәссамдарына хат яҙырға йыйына. Рәссамдарға бына тигән реклама буласаҡ ул. Ҡайһы бер бүлектәргә, фәнни ҡаҙаныштарға нигеҙ һалыусыларҙың, яңы ысулдарҙы башлап ҡулланыусыларҙың, ветерандарҙың исемдәрен, хеҙмәттәрен мәңгеләштерерлек, дауахананың тарихын сағылдырырлыҡ музей ойоштороу ҙа баш табиптың атҡарыр эштәре иҫәбендә тора. Махсус китапхана фән кешеһенә бигерәк тә кәрәк.

Ҡырылмаһа ҡырҡ эш ярылып ятҡанда ла баш табип хеҙмәткәрҙәре хаҡында онотмай: йыл һайын диспансеризация үткәрелә, йыл дауамында бер ҙә ауырымай эшләгәндәргә отпускыға өс көн ял өҫтәлә, путевкаларҙың ярты хаҡын профсоюз түләй. Ветерандар советы өлкәндәрҙе ололау көндәрен билдәләй, балалар көндәре үткәреү — үҙәктең даими эше.

Республика перинаталь үҙәге коллективы хәйриә акцияларында ла актив ҡатнаша: Хәйбулла, Әбйәлил районДарын һыу баҫҡан саҡта уларға 50 постель комплекты тапшыралар. Шаран районы ҡарттар, Баймаҡ балалар йорттарына әйбер йыйып бирәләр. Украинаның Донецк, Луганск өлкәләренә ярҙам йөҙөнән бер көнлөк эш хаҡы бүленә. Уны илтеп тапшырыусылар коллектив алдында отчет бирә.

Байрамғоловтың яҡшы эштәре хөкүмәт тарафынан юғары баһаланып килә: уға Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған табибы (1999 й.), Рәсәй Федерацияһының һаулыҡ һаҡлау отличнигы (2005 й.) исемдәре бирелде. Халыҡтың сәләмәтлеген нығытыу, халыҡ һанын үҫтереү эшенә ҙур өлөш индергәне өсөн Өфө мэрияһы 2008 йылда уны «Ҡала алдындағы хеҙмәттәре өсөн» билдәһе менән бүләкләне. Эске эштәр министрлығының һәм баш ҡала округының күп һанлы почет грамоталары быларға өҫтәлмә.

Әле ул йәш. Йәштәрсә дәрт-дарманы ҡайнап торған табиптың яуланаһы үрҙәре алда әле. Яҡты хыяллы, тәүәккәл, эшкә ғәйрәтле, киләсәккә ҙур өмөтлө кеше ул Фирғәт Миҙхәт улы Байрамғолов.